БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ МӘҒАРИФ МИНИСТРЛЫҒЫ

ПДБМУ СИБАЙ ПЕДАГОГИЯ КОЛЛЕДЖЫ

# БАШҠОРТ ТЕЛЕНӘН ЭШ ПРОГРАММАҺЫ

**(Рабочая программа по башкирскому языку с изучением языка как государственного-I курс)**

44. 02. 02 «Башланғыс кластарҙа уҡытыу»
44. 02. 01 «Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙы тәрбиәләү»
49. 02. 01 «Физик культура»

Сибай 2015

ПЦК ултырышында
тикшерелде һәм раҫланды

Уҡыу-уҡытыу бүлегенең
директор урынбаҫары:

___________/Бердникова Г.В./

ПЦК рәйесе:

__________/ Шәкирова Г.М../

Авторы: Харисова Г.Д.,
башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы
Рецензенттар: Шәкирова Г. М.,
башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы

Латыпова Р.М., филология фәндәре кандидаты,
БДУ- ның Сибай институты башҡорт филология
кафедраһы доценты

# АҢЛАТМА ЯҘЫУ

Педагогия колледждарына грамоталы, юғары компетентлы белгестәр әҙерләп сығарыу йөкмәтелгән.

Был иһә студентка башҡорт телен тейешле кимәлдә өйрәтеү, уны телмәр мәҙәниәте менән таныштырыу, уның ижади һәләтен үҫтереү уҡытыусының мөҡәддәс бурысы икәнлеген асыҡ күрһәтә.

Башҡорт теленән эш программаһы Усманова М.Ғ. тарафынан төҙөлгән «Башланғыс һәм урта профессиональ белем биреүсе учреждениелар өсөн башҡорт теленән программа»ға /2015/, дәүләт белем биреү стандарты талаптарына нигеҙләнеп төҙөлдө.

Эш программаһы башҡорт теленән булған барлыҡ эштәрҙең йөкмәткеһен һәм йүнәлештәрен үҙ эсенә ала, быға тиклем эйә булынған белемгә таяна.

Башҡот теле дәрестәренең бурыстары:

- студенттарҙың фонетика һәм графика, лексика һәм фразеология, грамматика һәм дөрөҫ яҙылыш буйынса белемен нығытыу һәм артабан тәрәнәйтеү күнекмәләрен үҫтереү;
- уларҙың орфографик һәм пунктацион грамоталығын камиллаштырыу;
- башҡорт теле буйынса махсус уҡыу йорттарының белем стандарттарына ярашлы рәүештә тел һәм уның законлары тураһында дөйөм мәғлүмәттәр биреү;
- телмәрен һәм фекерен үҫтереүҙе һөнәргә бәйләп, предмет – ара бәйләнештәрҙе киңерәк файҙаланыу.

Башҡорт теле буйынса студенттар үҙләштерергә тейешле күнекмәләр:

- телдең йәмғиәттәге роле;
- әҙәби тел нормалары;
- башҡорт теленең диалекттары:
- телмәр төрҙәре. Текст;
- һүҙҙең лексик һәм грамматик, тура һәм күсмә мәғәнәһе;
- фразеологик берәмектәрҙең төп билдәләре;
- телмәр өндәре. Фонема;
- һүҙгә фонетик анализ;
- һүҙ составы. Морфема. Һүҙҙең мәғәнәүи өлөшө;
- һүҙҙең грамматик мәғәнәһе, грамматик категориялары, формалары;
- һүҙ төркөмдәре.

Башҡорт теле дәүләт теле итеп уҡытылған урта профессиональ белем биреүсе уҡыу йорттары студенттары, уҡыусылары өсөн төҙөлгән был программала, рус телле балаларҙың мәктәптә башҡорт телен уҡып килеүҙәрен һәм улар араһында бөтөнләй өйрәнмәүселәр ҙә булыуын иҫәпкә алып, дөйөм бер программа һәм уның өлөштәрен төшкил иткән компоненттарҙы айырым-айырым биреүҙе, шулай уҡ бер аҙ булһа ла методик күрһәтмәләр биреп китеүҙе кәрәкле тип һанайыҡ. Был алым уҡытыусы өсөн бик уңайлы булыр, сөнки ул уҡыусыларҙың белем кимәленә ҡарап,

студенттарҙың ниндәй темаларҙы (лексика, грамматика буйынса) үтеүҙәрен, улары нисек үҙләштереүҙәрен иҫәпкә алып, артабанғы эшен ойоштора ала.

Бында тел буйынса түбәндәге белешмәләр урын алды:

-өндәрҙе башҡортса дөрөҫ әйтеү, уҡый белеү;

-дөрөҫ интонация менән уҡыу;
-морфология буйынса ҡайһы бер күрһәтмәләр;
-темалар буйынса лексик һәм грамматик минимумдар.

Шулай уҡ, дәрестәрҙә ҡаралған, дәрестең бер өлөшө булып торған компоненттар ҙа айырым бер урынға тупланды.

Был уҡытыусыға темаларҙы түбәндәгесә теүәлләргә мөмкинлек бирә:
-дәрестә үтеләсәк темалар исемлеге;
-төрлө ситуациялар буйынса диалог темалары;
-ижади эш өсөн темалар;
-дидактик материал туплау өсөн лексик-ситуатив темалар;
-эш ҡағыҙҙары төрҙәре.

Урта профессиональ белем биреүсе уҡыу йорттары студенттары менән эште түбәндәге мәғлүмәттәрҙе биреүҙән башларға кәрәк булыр.

Башҡорттарҙың таралыу территорияһы. Төрки телдәр араһында башҡорт теле. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәренең башҡа телдәрҙә лә осрауы. Башҡорт телен өйрәнеүҙең әһәмиәте һәм мөһимлеге.

Башҡорт яҙыуы тарихы.

Хәҙерге ваҡытта Рәсәйҙә һәм донъяла башҡорт телен өйрәнеү.

Башҡортостанда башҡорт һәм рус телдәренең бер үк хоҡуҡлы дәүләт теле булыуы.

Башҡорт теленең академик грамматикаһы. Һүҙлектәре булыуы, лексикография буйынса ҡаҙаныштары.

Эш программаһының төҙөлөшө түбәндәгесә: аңлатма яҙыу, уҡыу предметына дөйөм характеристика, уҡыу планында предметтың урыны, уҡыу предметын үҙләштереү һөҙөмтәһе, тематик план, программаның йөкмәткеһе, ҡулланылған әҙәбиәт теҙмәһе,

Аралағы аттестация формаһы – дифференциаль зачет.

# УҠЫУ ПРЕДМЕТЫНА ДӨЙӨМ ХАРАКТЕРИСТИКА

Башҡортостан Президентының 1999 йылдың 15 февралендәге Указы менән башҡорт теле республикабыҙҙа, рус теле менән бер рәттән, дәүләт теле тип раҫланды. Ошо Указға ярашлы һәм Башҡортостан Республикаһының «Мәғариф тураһында» Законы нигеҙендә республика мәктәптәрендә уҡытыу һәм тәрбиә биреү Концепцияһы төҙөлдө. (Хисамитдинова Ф.Ғ. Хәҙерге шарттарҙа башҡорт телен уҡытыу концепцияһы. – Йыйынтыҡ: Суверенитет шарттарында башҡорт теле һәм әҙәбиәтен өйрәнеүҙең көнүҙәк мәсьәләләре. – Өфө, 1995, 33-сө бит). Концепция нигеҙендә башҡорт телен уҡытыу, уҡыусыларҙың был телде белеү-белмәүҙәренә ҡарап, өс төркөмгә бүлеп алып барыла:

1. Башҡорт мөхитендә тыуып үҫкән һәм башҡорт мәктәбендә уҡыған балалар.
2. Башҡорт мөхитендә үҫмәгән, рус һәм башҡа телдә уҡытҡан мәктәптәрҙә белем алған, башҡорт телен предмет булараҡ өйрәнгән башҡорт балалары.
3. Башҡорт телен белмәгән баҡорт һәм башҡа милләт балалары. Улар рус мәктәптәрендә белем алған, башҡорт телен предмет булараҡ өйрәнгән.

Башҡортостан Республикаһының «Мәғариф тураһында» Законының 7-се статьяһына үҙгәреш индерелгәндән һуң, 2006/2007 уҡыу йылынан алып башҡорт теле дәүләт теле итеп белем һәм тәрбиә биреүсе уҡыу йорттарының бөтәһендә, шул иҫәптән, башланғыс һәм урта профессиональ белем биреүсе уҡыу йорттарында ла уҡытыла, өйрәнелә башланы. Был ҡыуаныслы хәл, әлбиттә, быға тиклем башҡорт теле уҡытылмаған уҡыу йорттары өсөн программалар һәм, уға нигеҙләнеп, дәреслектәр булдырыу бурысын ҡуя.

Тәҡдим ителгән программа, башҡорт телен уҡытыу концепцияһы һәм белем биреү стандартлы нигеҙендә, урта профессиональ белем биреүе уҡытыу йорттарында башҡорт телен дәүләт теле итеп өйрәтеү, уҡытыу өсөн төҙөлдө.

Был уҡыу йорттарына, ҡағиҙә булараҡ, рус мәктәптәрен тамамлаусы төрлө милләт балалары килә. Уларҙың башҡорт телен белеү кимәлдәре лә төрлөсә була. Ошо үҙенсәлек программа төҙөгәндә иҫәпкә алынмай ҡалманы.

Программаның төп йүнәлеше уҡытыусыларҙың сит телдәрҙе уҡытыу, шулай уҡ рус телен, сит телде милләт-ара аралашыу теле булараҡ уҡытыу методикаһына ҡараған хеҙмәттәрҙән сығып билдәләнде һәм уларға таянып яҙылды.

Башҡорт телен дәүләт теле итеп уҡытыуҙың маҡсаты ла, бурыстары ла, методикаһы ла үҙенсәлекле, сөнки билдәле ваҡыт эсендә студент башҡорт телен өйрәнеп, имтихан тоторға тейеш. Ошо маҡсатты күҙ уңында тотоп, программа түбәндәгесә төҙөлдө:

-башҡортса белмәгән йәки насар белгән төркөмдәрҙә башҡорт телен уҡытыуҙың маҡсаты һәм бурыстары билдәләнде;

-башҡортса һөйләшергә, аралашырға тиҙерәк өйрәтеү өсөн материалдар лексик-тематик принцип буйынса бирелде;

-башҡорт теленең лексик байлығын үҙләштереү маҡсатында темалар буйынса лексик материал һәр дәрестә айырым бирелде (уҡытыусы һүҙҙәрҙе тема буйынса өҫтәмә рәүештә тәҡдим итә ала);

-грамматик материал, ялғауҙарҙы урынлы ҡулланып, дөрөҫ һөйләүгә, бәйләнешле телмәр үҫтереүгә, дөрөҫ яҙырға өйрәтеүгә булышлыҡ итергә тейеш. Шуға күрә темаларҙың йөкмәткеһенә ҡарап тел материалы һайланды;

-телмәр мәҙәниәтен үҫтереү һәр дәрестең иғтибар үҙәгендә булырлыҡ итеп, һәр тематик блокка бәләкәй темалар һәм коммуникатив ситуациялар тәҡдим ителде.

Программалар һәр тема һайын телмәр үҫтереү буйынса яҡынса эш төрҙәре тәҡдим ителә. Буласаҡ белгестәр, профессиональ лексиканы дөрөҫ ҡулланып, бирелгән ситуацияларҙы, диалогтарҙы, айырым темаға ҡоролған тематик һөйләшеүҙәрҙе төҙөй алырлыҡ дәрәжәлә телде үҙләштерергә бурыслы. Ирекле йәки һәр темаға бәйле практик эштәр эшләтеү, беренсенән, студенттарҙың телмәрен үҫтерһә, икенсенән, уларҙы ижади эшләргә өйрәтә.

## УҠЫУ ПЛАНЫНДА ПРЕДМЕТТЫҢ УРЫНЫ

1994 йылда Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай башҡорт телен рус теле менән бер рәттән Башҡортостан Республикаһында дәүләт теле менән итеп иғлан итте. Ә инде 2005 йылдың 7 июнендә Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай Башҡортостан Республикаһының «Мәғариф тураһында» Законына 7-се статьяны индерҙе. Уға ярашлы, Башҡортостан Республикаһында мәктәпкәсә балалар учреждениеларының, дөйөм белем биреүсе мәктәптәрҙең, башланғыс һәм урта профессиональ белем биреүсе уҡыу йорттарының барыһында ла башҡорт телен дәүләт теле итеп уҡытыу индерелде. Шуға ярашлы рәүештә башҡорт телен урта махсус уҡыу йорттарында уҡытыу буйынса дәүләт стандарты булдырылды. Ошо нигеҙҙә башҡорт теле буйынса эш программаһы төҙөлдө.

Программа бик актуаль, сөнки ул Башҡортостан Республикаһының төп халҡы теле – башҡорт телен башҡорт ерендә урынлашҡан башланғыс һәм урта профессиональ белем биреүсе уҡыу йорттарында белем алыусы студенттарға дәүләт теле итеп өйрәтеү маҡсатында төҙөлдө. Һәр халыҡ, ниндәй милләттән булыуына ҡарамаҫтан, ҡайһы милләт ерендә йәшәй, шул халыҡтың телен белергә, аралаша алырға, ул халыҡтың тарихы менән таныш булырға, уны ихтирам итергә тейеш.

# УҠЫУ ПРЕДМЕТЫН ҮҘЛӘШТЕРЕҮ ҺӨҘӨМТӘҺЕ

Башҡорт телен өйрәтеүҙең маҡсаты
һәм бурыстары
Программа түбәндәге маҡсат һәм бурыстарҙы күҙ уңында тота:

1) уҡыусыларҙа башҡорт телен өйрәнеүгә ыңғай ҡараш тыуҙырыу;

2) дөйөм белем биреү маҡсаты – тел компетенцияһын булдырыу. Уҡыусыларға башҡорт теле буйынса дөйөм белем биреү, башҡорт теленең үҙ аллы фән икәнен аңлатып өйрәтеү:

а) фонетика, лексика, грамматик, орфографик һәм пунктуацион күнекмәләргә эйә булдырыу. Һүҙбәйләнештәрҙе һәм һөйләмдәрҙе дөрөҫ төҙөй белергә өйрәтеү;

б) орфоэпик, лексика, һүҙьяһалыш, орфографик һәм пунктуацион күнекмәләргә эйә булдырыу. Һүҙбәйләнештәрҙе һәм һөйләмдәрҙе дөрөҫ төҙөй белергә өйрәтеү;

3) ғәмәли маҡсат: телде практик яҡтан өйрәтеү, студенттарға телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәрен (һөйләү телмәре, яҙма телмәр, диалогик һәм монологик телмәр) төшөндөрөү. Башҡортса һөйләгәндә аңларға, аралаша белергә, дөрөҫ яҙырға өйрәтеү. Уларҙың төрлө типтағы текстарҙы төҙөй, эш ҡағыҙҙары өлгөләрен яҙа белеүенә ирешеү;

4) тәрбиәүи маҡсат: төрлө милләт студенттары араһында үҙ-ара дуҫлыҡ, теләктәшлек хистәре толерантлыҡ тәрбиәләү.

Башланғыс һәм урта профессиональ белем биреүсе уҡыу йорттары студенттары өсөн программа төҙөгәндә телде өйрәтеүҙең түбәндәге психологик-педагогик һәм методик принциптары иҫәпкә алынды: телдең аралашыу функцияһын башҡарыусы, системалы, комплекслы булыу принциптары, туған телгә таянып өйрәтеү принцибы һ.б.

Туған телгә таянып өйрәтеү принцибы – башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәтеүҙә үҙенсәлекле методик принцип ул. Уның нигеҙендә студенттарҙың аңында туған телдәренең һәм өйрәнелгән телдең системалы бәйләнеше ятыуын иҫәпкә алыу кәрәклеге тора. Ике тел өсөн дә уртаҡ булған тел күренештәрен өйрәнгәндә (мәҫәлән, һүҙ төркөмдәре, һөйләм төрҙәре, тура телмәр һ.б) туған тел дәрестәрендә алған күнекмәләр башҡорт телен еңелерәк өйрәнеүгә булышлыҡ итә.

Башҡорт теленең үҙенсәлекле күренештәрен өйрәткәндә ҡыйынлыҡтар ҙа бар. Был бигерәк тә башҡорт өндәрен әйтергә өйрәнгәндә, һөйләм төҙөгәндә килеп тыуа.

Рус телле аудиторияла башҡорт теленә өйрәтеүҙә ҙур урын рус теле менән башҡорт телен сағыштырып өйрәтергә бирелә.

Шуны ла әйтергә кәрәк: башҡорт телен өйрәнеү үҙ туған телеңә иғтибарҙы арттыра, уның теге йәки был күренешенә иғтибар итергә мәжбүр итә.

Маҡсатҡа ирешеү өсөн ҡуйылған бурыстар:

1. Коммуникатив бурыстар. Ул иң беренсе сиратта башҡорт телендә һөйләшергә, аралышырға өйрәтеүҙе күҙ уңында тота. Башҡорт теле мотлаҡ практик маҡсаттан сығып, практик рәүештә өйрәнелә (коммуникатив йүнәлеш).

2. Филологик бурыстар. Ул башҡорт телен айырым бер фән итеп ҡарап, уның буйынса дөйөм белем биреүгә, уның фәнни нигеҙҙәрен аңлатыуға ҡайтып ҡала. Ҡағиҙәләрҙе белеү һүҙбәйләнештәрҙе һәм һөйләмдәрҙе дөрөҫ төҙөргә ярҙам итергә тейеш.

3. Тәрбиәүи һәм профессиональ бурыстар. Ул студенттар һайлаған һөнәргә бәйле. Башланғыс һәм урта белем биреүсе уҡыку йорттарын тамамлакған белгес үҙ эшендә башҡорт теленән алған белемен файҙаланырға; башҡортса аралыша алырға, үҙ һөнәре тураһында матур итеп һөйләй белергә, башҡортса газета уҡыу, радио тыңлау, телевизор һәм спектакелдәр  ҡарау дәрәжәһенә ирешергә тейеш.

Һәр телде белеү телмәр эшмәкәрлегенең дүрт төрөнә өйрәнеүҙе маҡсат итеп ҡуя. Улар түбәндегеләргә ҡайтып ҡала:

а) тыңлап (ишетеп) аңларға өйрәтеү;

б) уҡырға өйрәтеү;

в) һөйләргә өйрәтеү;

г) яҙырға өйрәтеү.

Башланғыс һәм урта белем биреүсе уҡыу йолрттарында студенттарҙы башҡорт теленә  өйрәтеү һаналған маҡсаттарға ярашлы алып барылырға тейеш. Башҡорт теленең дәүләт теле итеп өйрәтелеүе буласаҡ белгестәрҙән башҡортса уҡыу, һөйләшә белеү һәм яҙыу күнекмәләренә эйә булыуҙы талап итә.

Башҡорт теленән белем биреү йөкмәткеһенең минимум күләме.

Студенттар түбәндәге күнекмәләргә эйә булырға тейеш:

-башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен, хәрефтәрен белеү, дөрөҫ әйтеү;

-сингармонизм законын практик үҙләштереү;

-программала тәҡдим ителгән темалар, ситуациялар буйынса һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе әйтә белеү;

-һүҙҙәрҙең мәғәнәһенә ҡарап, уларҙы телмәрҙә, диалогта, ситуатив аралышыуҙа ҡуллана алыу;

-тәҡдим ителгән ситуацияға бәйләп, диалог, монолог, хикәйә төҙөй белеү;

-һөйләмдәрҙә һүҙ тәртибен үҙләштереү; һорау, хәбәр, өндәү һөйләмдәрҙе дөрөҫ интонация менән уҡыу шһәм һөйләү; был һөйләмдәр аҙағында тыныш билдәләрен ҡағиҙәгә ярашлы ҡуя белеү;

-дөрөҫ һәм тасуири уҡыу, уҡығандың йөкмәткеһен һөйләү;

-һорау һәм яуап бирә алыу;

-йәнле телмәрҙе тыңлау һәм төшөнөү; тексты уҡыу, аңлау һәм йөкмәткеһен һөйләү;

-һүрәттәр, картиналар буйынса һөйләм, хикәйә төҙөү;

-ҙур булмаған изложениялар, бирелгән темаға инша яҙыу;

-рәсми йәки эш ҡағыҙҙарын (ғприза, протокол, акт, автобиография, характеристика, справка һ.б) яҙа белеү;

-башҡорт телендә яҙма йәки телдән сығыш яһау.

## УКЫУ ПРОЦЕСЫН ЙЫҺАЗЛАНДЫРЫУҒА БУЛҒАН МИНИМАЛЬ ТАЛАПТАР

Башҡорт теле дәрестәрендә төрлө әсбаптар:

- дәреслектәр;
- дәреслек-хрестоматиялар;
- эш дәфтәрҙәре;
- дидактик материалдар;
- һүҙлектәр;
- таблицалар;
- плакаттар һ.б.,

Аудиовизуаль саралар:

- фоно;
- аудиояҙмалар;
- видеофильмдар;
- компьютер дәреслектәр;
- һүҙлектәр;
- картиналар;
- фоторепродукциялар һ.б. файҙаланыу мотлаҡ.

ТЕМАТИК ПЛАН

| БҮЛЕКТӘР ТЕМАЛАР | Студентҡа максималь эш күләме, сәғәт | Аудитор сәғәттәр һаны | | | Студенттың үҙ аллы эше |
|---|---|---|---|---|---|
| | | Бөтәһе | Лаборатор эш | Практик эш | |
| 1-се бүлек.<br>Тел һәм телдәр | | | | | |
| 1.1 Тел тураһында төшөнсә.<br>Белем көнө | 3 | 2 | | 2 | 1 |
| 1.2. Башҡорт теле<br>Таныш булайыҡ! | 3 | 2 | | 2 | 1 |
| 1.3. Тел төҙөлөшө<br>Үҙем тураһында | 3 | 2 | | 2 | 1 |
| 1.4. Тел һәм телмәр<br>Был беҙҙең төркөм | 3 | 2 | | 2 | 1 |
| 1.5Телмәр мәҙәниәте<br>Беҙҙең ғаилә | 3 | 2 | | 2 | 1 |
| 2-се бүлек<br>Лексика | | | | | |
| 2.1. Һүҙҙең күп мәғәнәлеге<br>Атай-әсәйем һәм туғандарым | 3 | 2 | | 2 | 1 |
| 2.2.Омонимдар<br>Синонимдар<br>Антонимдар<br>Белем алабыҙ.Беҙҙең уҡыу йорто | 3 | 2 | | 2 | 1 |
| 2.3. Төп башҡорт һүҙҙәре<br>Үҙләштерелгән һүҙҙәре<br>Рус һәм башҡорт телдәрендә үҙләштерелгән һүҙҙәр | 3 | 2 | | 2 | 1 |
| 2.4. Калькалар<br>Актив һәм пассив һүҙҙәр<br>Башҡорт әкиәттәре | 3 | 2 | | 2 | 1 |
| 2.5.Диалект һүҙҙәре<br>Минең тыуған ерем | 3 | 2 | | 2 | 1 |
| 2.6.Терминдар<br>Һүҙлектәр<br>Беҙҙең өй.Өй кәрәк-яраҡтары | 3 | 2 | | 2 | 1 |
| 2.7. Эмоциональ-экспрессив һүҙҙәр<br>Минең дуҫтарым | 3 | 2 | | 2 | 1 |
| 2.8. Фразеологик берәмектәр<br>Минең шөғөлдәрем | 4 | 2 | | 2 | 2 |
| 3-сө бүлек.<br>Фонетика<br>Орфоэпия | | | | | |
| 3.1Интонация. Ижек. Баҫым<br>Спорт менән шөғөлләнәм | 3 | 2 | | 2 | 1 |
| 3.2. Һуҙынҡы өндәр<br>Театрға ,концертҡа | 4 | 2 | | 2 | 2 |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| йөрөргә яратам | | | | | |
| 3.3.Тартынҡы өндәр<br>Китап уҡырға яратам | 4 | 2 | | 2 | 2 |
| 3.4.Орфоэпия.<br>Орфография<br>Ваҡыт.Сәғәт нисә? | 3 | 2 | | 2 | 1 |
| 3.5.Графика һәм алфавит<br>Көн,ай  исемдәре | 5 | 4 | | 4 | 1 |
| 4-се бүлек.<br>Морфология | | | | | |
| 4.1.Исем<br>Бөгөн ниндәй көн? | 8 | 6 | | 6 | 2 |
| 4.2.Сифат<br>Иртәгә көн нисек була? | 9 | 6 | | 6 | 3 |
| 4.3.Һан<br>Һауа торошо тураһында һөйләшәйек | 7 | 4 | | 4 | 3 |
| 4.4. Алмаш<br>Йыл миҙгелдәре | 4 | 2 | | 2 | 2 |
| 4.5. Ҡылым<br> Көн режимым. | 13 | 10 | | 10 | 3 |
| 4.6. Рәүеш<br>Байрамдар | 4 | 2 | | 2 | 2 |
| 4.7. Бәйләүселәр<br>Һабантуй | 3 | 2 | | 2 | 1 |
| 4.8.Теркәүестәр<br>Тыуған көн | 3 | 2 | | 2 | 1 |
| 4.9.Киҫәкселәр<br>Өфө-Башҡортостандың баш ҡалаһы | 3 | 2 | | 2 | 1 |
| 4.10.Ымлыҡтар.<br>Оҡшатыу һүҙҙәре.<br>Сәйәхәт,экскурсия | 2 | 2 | | 2 | - |
| Дифференциаль зачет | 2 | 2 | | 2 | |
| Бөтәһе: | **117** | **78** | | **78** | **39** |
| | | | | | |

**ЙӨКМӘТКЕҺЕ**

**1-се бүлек. Тел һәм телмәр**

**Тема 1.1. Тел тураһында төшөнсә.**
**Белем көнө**

Үҙләштерелергә тейеш белем:

- тел аралашыу ҡоралы;
- тел-фекерҙе сағылдырыу сараһы;
- телдең төп вазифалары;
- телдең социаль күренеш булараҡ асылын, тәбиғәтен аңлау.

Тел – үҙенсәлекле һәм туҡтауһыҙ үҫеүсе система. Ул – аралашыуҙың, фекерләүҙең, быуындан-быуынға тарихи-мәҙәни традицияларҙы тапшырыуҙың мөһим сараһы.

Практик эш төрҙәре:

- әҙәби әҫәрҙәрҙән миҫалдар яҙыу;
- тел тураһында ғалимдарҙың әйткән һүҙҙәрен туплау.

Студенттың үҙ аллы эш төрө №1:

- тел тураһында мәҡәлдәр яҙыу.

**Тема 1.2. Башҡорт теле.**
**Таныш булайыҡ**

Үҙләштерелергә тейеш белем:

- башҡорт теленең функциональ үҫеше;
- башҡорт теленең башҡа ҡәрҙәш телдәр араһындағы урыны;
- яҙма тел, элекке йәмғиәттең яҙма теле;
- туған телдең әһәмиәте.

Күнекмәләр:

- лингвистик йөкмәткеле һорауҙарға дөрөҫ яуап бирә белеү;
- әсә теленең бөтә халыҡтың һәм айырым халыҡтың яҙмышындағы ролен аңлау.

Практик эш төрҙәре:

- туған тел тураһында мәҡәл, әйтемдәр, яҙыусыларҙың шиғырҙарын туплау;
- тел ғалимдары тураһында мәғлүмәттәр туплау.

Студенттың үҙ аллы эш төрҙәре № 2 :

- «Әсәм теле- сәсән теле», «Теле барҙың - иле бар» темаларына инша яҙыу.

**Тема 1.3. Тел төҙөлөшө.**
**Үҙем тураһында**

Үҙләштерелергә тейеш белем:

- тел тураһында фән бүлектәрен;
- хәҙерге башҡорт теле курсы бүлектәре.

Күнекмәләр:

- текстың айышына төшөнөү, хәҙерге башҡорт әҙәби телен, уны өйрәнеү бүлектәрен һанап күрһәтеү, һәр бүлектең асылын аңлатыу.

Практик эш төрҙәре:

- танылған ғалим Н.К.Дмитриев профессор Ж.Ғ.Кейекбаевтың «Башҡорт әҙәби теленең дөрөҫ әйтелеше» тигән эшенә ҡарата яҙған баһаламаны уҡып, Ж.Ғ.Кейекбаевтың хеҙмәтенә үҙҙәренең мөнәсәбәттәрен белдереү.

Студенттың үҙ аллы эш төрө №3:

- конспект яҙыу.

**Тема 1.4. Тел һәм телмәр.**
**Был беҙҙең төркөм**

Үҙләштерелергә тейеш белем:

- тел – билдәләрҙең үҙенсәлекле системаһы;
- телмәр – Кеше эшмәкәрлегенең бер формаһы;
- тел һәм телмәр айырмаһы;
- әҙәби тел – нормалаштырылған тел;
- тел нормаһы.

Күнекмәләр:

- тел һәм телмәр араһындағы айырманы аңлатыу;
- башҡорт әҙәби теле хаҡында ғалимдарҙың ҡарашын аңлата белеү.

Һәр телмәр ниндәй ҙә булһа маҡсаттан сығып башҡарыла: һорау, белеү, нимәләр тураһында хәбәр итеү. Телмәр эшмәкәрлеге үҙ маҡсат түгел, ул кешенең хеҙмәт, уҡыу, уйын, аралашыу кеүек һәм башҡа эшмәкәрлеге менән бергә башҡарыла.

Практик эш төрҙәре:

- «Тел һәм телмәр»,«Әҙәби телдең нормалары» тигән темаларға сығыш әҙерләү;

Студенттың үҙ аллы эш төрө №4:

- ғалимдарҙың тел тураһында фекерҙәрен йыйып, сығыш әҙерләү,тәҡдим ителгән тексты тәржемә итеү.

**Тема 1.5 Телмәр мәҙәниәте.**
**Беҙҙең ғаилә**

Үҙләштерелергә тейеш белем:

- телмәр мәҙәниәте – тел белеменең ғәмәли өлөшө;
- телмәр мәҙәниәтенең барлыҡҡа килеүе;
- телмәрҙең төрҙәре;
- яҡшы телмәр төшөнсәһенең өс билдәгә нигеҙләнеүе.

Күнекмәләр:

- тексты уҡып, телмәрҙең ниндәй төрҙәре булғанын әйтә алыу. Тормоштан миҫал килтерә алыу.

Телмәр мәҙәниәте, беренсенән, ул – дөрөҫ һөйләү һәм яҙыу, икенсенән, тел сараларын аралашыуҙың маҡсатына, шартына тап килтереп ҡулланыу.

Практик эш төрҙәре:

- бирелгән тексты уҡып, асылына төшөнөп һөйләп биреү.

Студенттың үҙ аллы эш төрҙәре №5:

- әҙәби әҫәрҙәрҙән миҫалдар яҙыу,тәржемә эшләү.

**2-се бүлек. Лексика**
**Тема 2.1. Һүҙҙәрҙең күп мәғәнәлеге.**
**Атай-әсәйем һәм туғандарым**

Үҙләштерелергә тейеш белем:

- лексика, һүҙ мәғәнәһе, төшөнсә;
- метафора, метаномия, перифраз тураһында.

Күнекмәләр:

- һүҙҙең күп мәғәнәлеген миҫалдар менән күрһәтә белеү.

Һүҙҙәрҙең күп мәғәнәлеге. Метафора, метонимия, перифраз, эвфелиезм күренештәре. Күп мәғәнәлекте телмәрҙә ҡулланыу.

Практик эш төрҙәре:

- тәҡдим ителгән текстант күп мәғәнәле һүҙҙәрҙе табырға. «Башҡорт теленең һүҙлеген» файҙаланып, уларҙың мәғәнәләрен аңлатыу.
- Студенттың үҙ аллы эш төрө №6:
- Атай-әсәй тураһында дуҫыңа хат яҙыу.

## Тема 2.2. Омонимдар. Синонимдар. Антонимдар. Белем алабыҙ. Беҙҙең укыу йорто

Үҙләштерелергә тейеш белем:

- Омонимдар. Синонимдар. Антонимдар;
- Ононимдарҙың төрҙәре;
- мәғәнә биҙәктәре буйынса айырып йөрөтелгән синонимдар;
- индивидуаль – стилистик антонимдар.

Күнекмәләр:

- Омоним, синоним, антонимдарҙы йәнле һөйләү телендә, яҙма телмәрҙә ҡуллана белеү;
- Омонимдар. Оминимдарҙың типтары; синонимдар, син-к рәт-градация, антонимдар.

Һын тыуҙырыуҙа саф антонимдарҙан тыш, контекстуаль ҡапма-ҡаршы мәғәнәле лексика берәмектәр ҙә ҡулланыла.

Практик эш төрҙәре:

- «Башҡорт халыҡ  ижадын» файҙаланып антоним һүҙҙәрҙең яһалышын тикшереү;
- З.Ғ.Ураҡсиндың «Башҡот теленең синонимдар һүҙлеген» файҙаланып билдәнең һәм хәрәкәттең дәрәжәләре арта барыу ыңғайына синонимдары теҙеп яҙыу.

Студенттың үҙ аллы эш төрҙәре  №7:

- шағирҙарҙың әҫәрҙәренән синонимдарға, антонимдарға, омонимдарҙға миҫалдар табыу.

## Тема 2.3. Төп башҡорт һүҙҙәре. Үҙләштерелгән һүҙҙәр. Рус һәм башҡорт телдәрендә үҙләштерелгән һүҙҙәр

Үҙләштерелергә тейеш белем:

- дөйөм Алтай һәм дөйөм төрки сығанаҡлы төп башҡорт һүҙҙәре;
- хәҙерге башҡорт лексикаһы;
- үҙләштерелгән һүҙҙәр.

Күнекмәләр:

- килеп сығышы яғынан башҡорт лексикаһына характеристика биреү;
- башҡорт теленең һүҙлеген дә үҙләштерелгән һүҙҙәрҙе төркөмләү.

Килеп сығышы яғынан башҡорт теленең һүҙлек составын ике ҡатламға – төп башҡорт һүҙҙәренә һәм үҙләштерелгән һүҙҙәргә – бүлергә мөмкин.

Төп башҡоорт һүҙҙәрен дөйөм Алтай һәм дөйөм төрки сығанаҡлы һүҙҙәр тәшкил итә.

Практик эш төрҙәре:

- «Башҡорт теленең һүҙлеге»нән дөйөм төрки сығанаҡлы төп башҡорт һүҙҙәрен – төп сифаттарҙы, тән өлөшө атамаларын һайлап яҙыу;
- «Башҡорт теленең һүҙлеге»нән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙе табып, уларҙың ниндәй стилистик ҡатламға ҡарағанлығын билдәләү.

Студенттың үҙ аллы эш төрө №8:

-миҫалдар яҙыу,тәржемә эшләү.

## Тема 2.4 Калькалар. Актив һәм пассив һүҙҙәр. Башҡорт әкиәттәре

Үҙләштерелгә тейеш белем:

- калькалар;
- актив һүҙҙәр;
- пассив һүҙҙәр;
- пассив һүҙҙәр төркөмдәре.

Күнекмәләр:

- тәҡдим ителгән өҙөктө уҡып урыҫ телендә урын алған башҡорт һүҙҙәрен күрһәтеү, ул һүҙҙәрҙең урыҫ теле йоғонтоһонда ниндәй үҙгәрештәр кисергәнен характерлау;
- актив һүҙҙәрҙе пассив һүҙҙәрҙән айыра белеү.

Сит тел ҡалыбы буйынса яңы һүҙ яһау калька тип атала.

Телдең һүҙлексоставын шартлы рәүештә ике төркөмгә бүлеп ҡарарға булла: актив һүҙлек һәм пассив һүҙлек. Пассив һүҙҙәр ике төркөмгә бүленә: иҫкергәндәргә һәм яңыларға.

Практик эш төрҙәре:

- пассив һүҙҙәр ҡулланып әкиәт яҙыу;
- тәҡдим ителгән шиғырҙарҙан алынған өҙөктәрҙе уҡып, һүҙҙәрҙең яһалышына күҙәтеү яһау.

Студенттың үҙаллы эш төрҙәре №9:

- пассив һүҙҙәр ҡулланып хикәйә йәки һөйләшеү /диалог/ төҙөү.

## Тема 2.5. Диалект һүҙҙәре. Минең тыуған ерем

Үҙләштерелергә тейеш белем:

- диалект һөйләм;
- диалектизмдар.

Күнекмәләр:

- йәнле һөйләү телен контролда тотоу;
- яҙма телмәрҙе тик әҙәби телдә генә яҙыу.

Диалект һүҙҙәре күркәм әҙәбиәттә персонаждарҙың телмәр үҙенсәлеген, ваҡиғалар барған урынды һүрәтләү маҡсатында йыш ҡулланыла.

Практик эш төрҙәре:

- үҙегеҙҙең яҡ һөйләш һүҙҙәрен барлап, мәғәнәләрен аңлатып, һөйләргә әҙерләнеү.

Студенттың үҙаллы эш төрҙәре №10 :

-	башҡорт һөйләштәре һүҙлектәренә ҡулланып, һәр студент үҙ яғы һөйләше тураһында конспект яҙып сығыш әҙерләү,тәҡдим ителгән тексты тәржемә итеү.

**Тема 2.6. Терминдар. Һүҙлектәр.**
**Беҙҙең өй.Өй кәрәк-яраҡтары**

Үҙләштерелергә тейеш белем:
- термин, терминология;
- һүҙлектәр;
- дөйөм ҡулланышлы һүҙҙәр.

Күнекмәләр:
- тәҡдим ителгән терминдарҙы күҙәтеп һәр терминды аңлау;
- тәҡдим ителгән энциклопедик һүҙлектең төҙөлөшө менән танышыу һәм фекерҙәрҙе дөрөҫ итеп әйтеү.

Терминдарҙы уларҙы омонимдары булған дөйөм ҡулланышлы һүҙҙәрҙән дә айыра белергә кәрәк.

Дөйөм ҡулланышлы һүҙҙең мәғәнәһен башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлегенән табыу.

Практик эш төрҙәре:
-	уҡытыусылар өсөн сығарылған энциклопедик һүҙлектәр менән танышыу. Һүҙлектәге фонетикаға, лексикаға ҡараған һүҙҙәре табырға һәм улар тураһында һөйләү.

Студенттың үҙәллы эш төрҙәре №11:
-	төрлө һүҙлектәрҙе күрһәтеү һәм үҙебеҙҙең фекер тураһында сығыш әҙерләү.

**Тема 2.7.Эмоциональ-экспрессив һүҙҙәр.**
**Минең дуҫтарым**

Үҙләштерергә тейеш белем:
- һеҙҙҙең хис-тойғоға бәйләнгән мәғәнә бирҙәге;
- эмоционаллектең белдереү юлдары;
- экспрессив сараларҙың төрҙәре.

Күнекмәләр:
- дөрөҫ интонация менән уҡырға өйрәнеү;
- уҡылғанға Лексик тикшереү яһай белеү, хис-тойғоло һүҙәрҙе табырға өйрәнеү.

Матур әҙәбиәттә экспрессив сараларға түбәндәге түбәндәге төрҙәргә бүләләлр: а) төп экспрессив лексика, б) экспрессияның морфологик юлы, в) һүҙ мәғәнәһен метафоролаштырыу, г) мәғәнәләре яҡын йә бер төрлө булған һүҙҙәрҙе ҡабатлау, д) төрлө стилистик буяулы әйтемдәрҙе алмаштырып, аймылыштырып ҡулланыу.

Практик эш төрҙәре:
- «Башҡорт теленең стилистик ҡаламдары» тигән темаға доклад әҙерләү;
- әҙәби әҫәрҙән хис-тойғоло һәм баһалау һүҙҙәре булған һөйләмдәр таббып яҙыу.

Студенттың үҙ аллы эш төрө №12:
-дуҫыңа характеристика яҙыу.

**Тема 2.8. Фразеологик берәмектәр.**
**Минең шөғөлдәрем**

Үҙләштерелергә тейеш белем:
- фразеологик берәмектәр йәки нығынған һүҙбәйләнештәр;
- ябай фразеологик ҡушылмалар;
- идиоматик әйтемдәр;
- мәҡәлдәр һәм тапҡыр һүҙҙәр;
- грамматик ҡоролошо яғынан фразеологик берәмектәр төркөмдәре.

Күнекмәләр:
- әҫәрҙәрҙә фразеологик берәмектәргә күҙәтеү яһау;
- ябай фразеологик ҡушымталарҙы һәм идиоматик әйтемдәрҙе танып белеү, уларҙы яҙма эштәрҙә файҙалана белеү.

Фразеологик берәмектәр килеп сығышы. Фразеологик берәмектәр төрҙәре. Фразеологик берәмектәр, күбеһенсә күсмә мәғәнәлә ҡулланылғанға, улар һынлы телмәр сараларын тәшкил итә.

Грамматик ҡоролошо яғынан фразеологик берәмектәр түбәндәге төркөмдәгә бүленә: Исем фразеологик берәмектәр, Сифат фразеологик берәмектәр, ҡылым фразеологик берәмектәр, рәүеш фразеологизмдар.

Практик эш төрҙәре:
- Ҡадир Әлибаев әҫәрҙәренән фразеологик берәмектәрҙе яҙып алыу һәм уларҙың мәғәнәләрен асыҡлау;
- бирелгән һүҙҙәрҙе фразеологик берәмектәр менән алмаштырыу.

Студенттың үҙаллы эш төрҙәре №13, 14:
- фразеологик берәмектәр ҡулланып/диалог /төҙөү.
- шөғөлдәр тураһында сығыш әҙерләү.

**3-сө бүлек. Фонетика. Орфоэпия.**
**Тема 3.1. Интонация. Ижек. Баҫым.**
**Спорт менән шөғөлләнәм**

Үҙләштерелергә тейеш белем:
- интонация;
- интонацияның берәмектәре;
- телмәр такты;
- ижек, асыҡ, ябыҡ, баҫымлы, баҫымһыҙ;
- баҫым;
- логик баҫым, эмфатик баҫым.

Күнекмәләр:
- һөйләмдәрҙе дөрөҫ интонация менән уҡырға өйрәнеү;
- башҡорт телендәге һүҙҙәрҙә баҫымды дөрөҫ ҡуйып уҡыу;
- һүәрҙе ижеккә дөрөҫ итеп белеү, юлдан юлға күсереү.

Интонация. Интонацияның элементтары. Ижектәр. Тел белемендә ижектәр ике йүнәлештә өйрәнелеүе.

Пратик эш төрҙәре:
- тәкдим ителгән әҫәрҙе дөрөҫ интонация менән уҡыу;
- һүҙҙәргә ялғау ҡушылғанда, ижек ҡалыҡтарының үҙгәреүен аңлатыу.

Студенттың үҙаллы эш төрҙәре №15:

-спортсылар тураһында өҫтәлмә мәғлүмәт туплау,сығыш әҙерләү.

**Тема 3.2. Һуҙынҡы өндәр.**
**Театрға ,концертҡа йөрөргә яратам**

Үҙләштерелергә тейеш белем:
- һуҙынҡы өндәр;
- киң һуҙынҡылар, тар һуҙынҡылар;
- алғы рәт һуҙынҡылары, артҡы рәт һуҙынҡылары;
- иренләшкән һуҙынҡылар, иренләшмәгән һуҙынҡылар;
- редукция, портеза, эпентеза, элизия.

Күнекмәләр:
- һуҙынҡыларға фонетик анализ яһау;
- тәҡдим ителгән текстарҙа осраған редукция, портеза, эпентеза, элизия күренештәрен аңлатыу;
- һуҙынҡыларҙы дөрөҫ әйтеү.

Башҡорт әҙәби телендәге һуҙынҡы өндәр. Башҡорт теленең һуҙынҡы өндәренең өс принцип буйынса бүленеше.

Редукция, портеза, эпентеза, элизия күренештәре.

Практик эш төрҙәре:
- һуҙынҡы өндәрҙең принциптары буйынса сыҡыш әҙерләү;
- тәҡдим ителгән текста һуҙынҡы өндәр өлкәһендәге үҙгәрештәрҙе күҙәтеү, һөйләү.

Студенттың үҙаллы эш төрҙәре №16, 17:
- һуҙынҡы өндәр буйынса схема төҙөү.
- сәнғәт тураһында текстҡа тәржемә эшләү

**Тема №3.3. Тартынҡы өндәр.**
**Китап уҡырға яратам**

Үҙләштерелергә тейеш белем:
- тартынҡы өндәр;
- тартынҡы өндәрҙең өс принцип буйынса төркөмләнеүе;
- тартынҡы өндәрҙең сиратлашыуы.

Күнекмәләр:
- тартынҡыларға фонетик анализ яһау;
- тартынҡы өндәрҙе яһалыу урыны буйынса төркөмләү, яһалыу буйынса төркөмләү.

Практик эш төрҙәре:
- өндәрҙең оҡшашыу һәм оҡшашмау күренештәрен, ирен өндәре һәм һуҙынҡылар менән тартынҡыларҙың ярашыу миҫалдар менән иҫбатлап һөйләү;
- тартынҡы өндәрҙең сиратлашыу миҫалдар килтереү.

Студенттың үҙаллы эш төрҙәре №18, 19:
- тартынҡы өндәр буйынса терәк схема төҙөү.
- «Китап-белем шишмәһе» темаһына инша яҙыу.

**Тема 3.4. Орфоэпия. Орфография.**
**Ваҡыт.Сәғәт нисә?**

Үҙләштерелргә тейеш белем:
- орфоэпия;
- орфоэпияның бурысы;
- орфография;
- орфография принциптары.

Күнекмәләр:
- телмәр ағышында һуҙынҡыларың һәм тартынҡыларҙың үҙгәрешен абайлау;
- һүҙбәйләнештәрҙе дөрөҫ интонация менән уҡыу һәм транскрипцияһын күрһәтеп яҙыу;
- һүҙҙәрҙе һәм ялғауҙарҙы дөрөҫ яҙыуу.

Орфоэпия. Тартынҡы өндәрҙең дөрөҫ әйтелеше. Орфография. Башҡорт әҙәби теле орфографияның принциптары.

Практик эш төрҙәре:
- орфографик ҡағиҙәләрҙе конкрет миҫалдар меннән иҫбатлау;
- тәҡдим ителгән миҫалдарҙа тартынҡыларҙың үҙгәрешен күрһәтеү.

Студенттың үҙаллы эш төрҙәре №20:

-тәҡдим ителгән темаға һөйләшеү төҙөү.

**Тема 3.5. Графика һәм алфавит.**
**Көн,ай исемдәре**

Үҙләштерелергә тейеш белем:
- яҙыуҙың килеп сығыуы;
- алфавит;
- графика;
- төрки халыҡтарҙың боронғо яҙыуҡомартҡылары.

Күнекмәләр:
- хәрефтәрҙе дөрөҫ атау;
- алфавит буйынса исемлек төҙөү.

Өндәрҙең яҙыуҙа хәрефтәр менән белдереүле. Графика һәм алфавит.

Практи кэш төрҙәре:
- «Башҡорт теленең орфографик һүлеген» файҙаланып беирелгән һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышын иҫбатлау;
- башҡорт һәм рус алфавитын сағыштырыу;
- башҡорт алфавитын иҫтә ҡалдырыу.

Студенттың үҙаллы эш төрҙәре №21:
- Өҫтәлмә сығанаҡтарҙы файҙаланып конспект яҙыу, сығыш әҙерләү.

**4-се бүлек. Морфология**
**Тема 4.1. Исем.**
**Бөгөн ниндәй көн?**

Үҙләштерелергә тейеш белем:
- исем;
- исемдәрҙең мәғәнәларе яғынан төркөмсәләргә бүленеше;
- исемдәрҙең эйәлек һәм хәбәрлек категориялары;
- исемдәрҙең килеш менән үҙгәреүе;

- килеш формалары стилистик файҙаланыу мөмкинселектәре.

Күнекмәләр:

- һөйләмдән исем һүҙ төркөмөн таныу;
- эйәлек, хәбәрлек заттарындағы исемдәрҙе телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу;
- исемдәрҙең ниндәй килештә тороуын асыҡларға өйрәнеү;
- исемдәрҙе дөрөҫ яҙыу;

Исемдең дөйөм мәғәнәһе. Исемдәрҙең яһалышы, ялғауҙар яҙылышы. Уртаҡлыҡ һәм яңғыҙлыҡ исемдәр. Исемдәрҙең һан, эйәлек заты, килеш менән үҙгәреүе.

Практик эш төрҙәре:

- исемдәрҙең килештәр менән үҙгәрешен дөйөмләштереү;
- боронғо халыҡ йырҙарында берлектә күплектәге исемдәрҙе анализлау;
- бирелгән шиғырҙарҙан исемдәрҙе табырға, уға составы һәм яһалышы яғынан анализ яһау.

Студенттың үҙ аллы эш төрҙәре №22, 23:

- тема буйынса терәк схемаһы эшләү.
- тәҡдим ителгән тексты тәржемә итеү.

## Тема 4.2. Сифат.
## Иртәгә көн нисек була?

Үҙләштерергә тейеш белем:

- сифаттың лексик – грамматик мәғәнәһе;
- сифаттың төркөмдәре;
- сифат дәрәжәләре.

Күнекмәләр:

- сифаттарҙың һүрәтләү сараһы булараҡ телмәрҙәге ролен асыҡлау;
- сифаттарҙың исемләшеп килеүҙәрен миҫалдар ярҙамында иҫбатлау;
- сифаттаҙы дөрөҫ яҙырға өйрәтеү.

Сифат лексик, грамматик мәҫәнәһе менән предметтың билдәһен белдереүе. Морфологик йәһәттән сифаттар үҙгәрмәүсән һүҙ төркөмөнә ҡарауы. Сифаттарҙың исем урынында ҡулланыла алыуы. Сифаттарҙың дөрөҫ яҙылышы.

Практик эш төрҙәре:

- тәҡдим ителгән һүҙбәйләнештәрҙе төркөмләп яҙып сығырға, ҙурлығы, күләме, формаһы, ваҡыты һ.б.;
- сифаттар ҡулланып инша – фекерләүҙәр яҙырға.

Студенттың үҙ аллы эш төрҙәре № 24, 25, 26:

- сифат буйынса терәк схемаһын төҙөү;
- тәҡдим ителгән текстҡа тәржемә эшләү;
- сифаттар булған йомаҡтар яҙыу.

## Тема 4.3. Һан.
## Һауа торошо тураһында һөйләшәйек

Үҙләштерергә тейеш белем:

- һандар;
- төп, тәртип, бүлем, йыйыу, сама, кәсер, үлсәү һандары;
- һандарҙың исемләшеп килеүе.

Күнекмәләр:

- һандарҙың дөрөҫ яҙылышы;
- һандарҙың һөйләмдәге вазифаларын билдәләү.

Һан тураһында төшөнсә. Һан төркөмсәләре. Һандарҙың дөрөҫ яҙылышы.

Практик эш төрҙәре:

- Ғ. Хөсәйеновтың «Тере китап» тигән парсаһын уҡып төп фекерҙе билдәләү;
- Һандарҙың дөрөҫ яҙылышын аңлау.

Студенттың үҙ аллы эш төрҙәре № 27, 28, 29:

- Әҙәби әҫәрҙәрҙән һан төркөмсәләре булған һөйләмдәрҙе табып күсереү;
- терәк схема төҙөү;
- һауа торошо тураһында диалог төҙөү.

## Тема 4.4. Алмаш.
## Йыл миҙгелдәре

Үҙләштерегә тейеш белем:

- алмаш;
- алмаштарҙың төркөмсәләре;
- алмаштарҙың төрлө һүҙ төркөмдәрен алмаштыра алыуы;
- алмаштарҙың стилистик мөмкинлектәре.

Күнекмәләр:

- алмаштырҙы дөрөҫ яҙыу;
- алмаштарҙы дөрөҫ итеп килештәр менән үҙгәртеү;
- алмаштарҙы төркөмсәләргә бүлеп яҙыу;
- алмаштарҙың эсендәге мәғәнәләрен аңлатыу.

Алмаш исемдәрҙең, сифаттарҙың, һандарҙың һәм рәүештәрҙең мәғәнәһен дөйөмләштереп килеүе.

Алмаштарҙың төркөмсәләре: Зат, күрһәтеү, һорау, билдәләү, билдәһеҙлек, юҡлыҡ алмаштары. Алмаштарҙың стилистик мөмкинлектәре.

Практик эш төрҙәре:

- тәҡдим ителгән әҫәрҙән өҙөктө алмаштарҙың ролен аңлатыу;
- тәҡдим ителгән текста алмаштарҙы билдәләп, уларҙы ҡайһы һүҙҙәрҙе алмаштырып килгәнен, ниндәй һүҙҙәргә һәм алмаштарға синоним була алыуҙарын тикшереү.

Студенттың үҙ аллы эш төрҙәре №30, 31:

- әҙәби әҫәрҙән алмаш төркөмсәләре менән миҫалдар яҙып алыу һәм аңлатыу;
- йыл миҙгелдәре тураһында миҫалдар яҙыу.

## Тема 4.5. Ҡылым.
## Көн режимым

Үҙләштерергә тейеш белем:

-ҡылымдарҙың лексик-семантик төркөмдәре;
-күсемле, күсемһеҙ ҡылымдар;
-ҡылымдарҙың грамматик категориялары. Һөйкәлеш;
-үткән заман, хәҙерге һәм кисәләк заман. Хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарының стилистик мөмкинлектәре;
-ҡылым йүнәлештәре;

- ҡылым төркөмсәләре;
- ҡылым рәүешлеге;
- ҡылымдарҙың һөйләмдәрҙәге синтаксик роле.

Күнекмәләр:

- үҙ аллы һәм ярҙамсы ҡылымдарҙы билдәләү;
- йүнәлеш, ҡылым төркөмсәләре, ҡылым рәүешлеге тураһында дөйөмләштереп аңлатыу;
- үткән заман, киләсәк һәм хәҙерге заман хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарының мәғәнәләрен аңлата белеү.

Ҡылым тураһында төшөнсә. Ҡылымдарҙың лексик-семантик төркөмсәләре: хәрәкәт ҡылымдары, эшмәкәрлек ҡылымдары, процесс йәки эшмәкәрлектең барышын аңлатыусы ҡылымдар, фекерләү ҡылымдары, хәл-торош ҡылымдары, телмәр ҡылымдары, инсафлыҡ ҡылымдары, яңғырау ҡылымдары, һынды сағылдырыусы ҡылымдар. Ҡылымдарҙың һөйкәлеш категориялары: бойороҡ һөйкәлеше, шарт һөйкәлеше, теләк һөйкәлеше; йүнәлеш категориялары: төп йүнәлеш, ҡайтым йүнәлеш. Ҡылым төркөмсәләре: Сифат, ҡылым, хәл ҡылым, Исем ҡылым, уртаҡ ҡылым. Ҡылым күләмдәре, уларҙың яһалыу формалары. Ҡылым рәүешлеге.

Практик эш төрҙәре:

- тәҡдим ителгән әҫәрҙән өҙөктө уҡып, йөкмәткеһенә төшөнөү. Хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарын барлап, уларҙың затын, һанын, заманын әйтеү;
- ҡылым йүнәлештәре тураһында күркәм әҫәрҙән миҫалдар килтереп һөйләү;
- «Кешегә баҙ ҡаҙһаң, баҫҡыс ҡуйырға онотма: үҙеңә кәрәк булыуы бар» тигән темаға үткән заман хәбәр һөйкәлешендәге ҡылымдарҙы ҡулланып инша яҙыу;
- журналдарҙан ҡылым күләмдәре булған һөйләмдәр күсереп алыу.

Студенттың үҙ алла эш төрҙәре №32, 33, 34 :

- «Башҡорт халыҡ ижады» китабынан ҡылымға миҫалдар яҙып алыу;
- «Ҡыш», «Ҡышҡы бер көн» исемле миниатюр иншалар яҙыу. Ҡылымдарҙың рәүешлек формаларын файҙаланыу;
- Көн режимы тураһында кәңәштәр яҙыу.

**Тема 4.6. Рәүеш.**
**Байрамдар**

Үҙләштерегә тейеш белем:

- рәүештең семантикаһы һәм грамматик үҙенсәлеге;
- рәүештең дәрәжәләре;
- рәүештең һөйләмдәге вазифаһы;
- рәүеш төркөмсәләре.

Күнекмәләр:

- рәүештең дөрөҫ яҙылышы;
- төрлө дәрәжәләге рәүештәрҙе әҫәрҙәргә билдәләй белеү;
- текстан рәүеш төркөмсәләрен таба белеү;
- рәүештәрҙең һөйләмдәге вазифаһын билдәләү.

Семантикаһы һәм структур ҡалыбы буйынса рәүеш сифатҡа яҡын тора.

Рәүештәрҙең дәрәжәләре: төп дәрәжәһе, сағыштырыу дәрәжәһе, артыҡлыҡ дәрәжәһе, аҙһытыу дәрәжәһе. Рәүештәрҙе мәғәнәләре буйынса төркөмләү.

Практик эш төрҙәре:

- «Башҡорт теленең һүҙлеген» ҡулланып рәүештәрҙең яһалышын аңлатыу;

- Рәүештәргә характеристика биреп, сығыш әҙерләү.

Студенттың үҙ аллы эш төрҙәре № 35, 36:

- рәүештәр тураһында терәк конспект яҙып, сығыш яһарға әҙерләнеү;
- байрамдар тураһында сығыш әҙерләү.

**Тема 4.7. Бәйләүестәр.**
**Һабантуй**

Үҙләштерергә тейеш белем:

- ярҙамы һүҙ;
- бәйләүестәрҙең төрҙәре;
- исем бәйләүестәренең төп һәм эйәлек килештә ҡулланылыуы;
- ҡылым бәйләүестәренең төшөм, төбәү, сығанаҡ килештәр менән ҡулланылыуы.

Күнекмәләр:

- бәйләүестәргә характеристика биреү;
- һөйләмдәрҙе морфологик яҡтан анализлау. Бәйлаүестәргә тикшереү яһау;
- бәйләүестәрҙең телмәрҙән функцияһын билдәләү;

Бәйләүестәр. Бәйләүестәрҙе ике ҙур төркөмгә бүләләр: Исем бәйләүестәре, ҡылым бәйләүестәре. Исем бәйләүестәре менән ҡылым бәйләүестәре араһында ҡырҡа сик ҡуйыу мөмкин түгел.

Практик эш төрҙәре:

- һөйләмдә бәйләүестәрҙең ниндәй мәғәнә төҫмөрләнеше биреүен, төрөн асыҡлау.

Студенттарҙың үҙ аллы эш төрҙәре №37:

- бәйләүестәр ҡулланып көлмөстәр уйлап яҙыу.

**Тема 4.8. Теркәүестәр.**
**Тыуған көн**

Үҙләштерергә тейеш белем:

- ярҙамсы һүҙ;
- бәйләнеш типтары буйынса бүленеше;
- морфологик составы буйынсы бүленеше.

Күнекмәләр:

- теркәүестәрҙе текстарҙан табыу, телмәрҙәге ролен аңлатыу;
- яҙма эштәрҙә файҙалана белеү;
- йыйыу һәм ҡаршу ҡуйыу, бүлеү һәм эйәртеүле теркәүестәрҙең асылын миҫалдар менән төшөндөрөү.

Теркәүестәр тураһында төшөнсә. Морфологик сотавы яғынан теркәүестәр ябайға һәм ҡушмаға бүленә. Һүҙҙәр һәм һөйләмдәр араһындағы бәйләнеш типтары буйынса теркәүестәр теҙеүсе һәм эйәртеүле теркәүестәргә бүленә.

Практик эш төрҙәре:

- гәзит – журналдарҙан теркәүесле һөйләмдәрҙе яҙып алыу.

Теркәүестәрҙең ниндәй өҫтәлмә мәғәнә биҙәге биреп килгәнен аңлатыу.

Студенттың үҙаллы эш төрҙәре №38:

- теркәүестәр тураһында терәк конспект яҙып, сығыш әҙерләү.

**Тема 4.9. Киҫәксәләр.**
**Өфө-Башҡортостандың баш ҡалаһы**

Үҙләштерелергә тейеш белем:
- ярҙамсы һүҙ;
- мәғәнә биҙәктәре буйынса бүленеше.

Күнекмәләр:
- киҫәксәләргә характеристика биреү;
- киҫәксәләрҙең дөрөҫ яҙылышы;
- телмәрҙәге функцияһын асыҡлау.

Киҫәксәләр килеп сығышы менән ярым грамматик, ярым лексик типтағы булыуҙары менән билдәле. Улар һорау, теләк, раҫлау, сикләнеү, шикләнеү мәғәнәләрен сағылдырыуҙары менән рәүешкә лә, бәйләүестәргә лә яҡын.

Практик эш төрҙәре:
- тәҡдим ителгән әҫәрҙең өҙөгөнәнкиҫәксәләрҙе билдәләп, мәғәнәләрен асыҡлау;
- мәғәнә биҙәктәре буйынсы киҫәксәләрҙең бүленешен һөйләү, миҫалдар килтереү.

Студенттың үҙаллы эш төрҙәре №39:
- әҙәби әҫәрҙәрҙән киҫәксәләр булған миҫалдар яҙыу, аңлатыу.

**Тема 4.10. Ымлыҡтар. Оҡшатыу һүҙҙәре.**
**Сәйәхәт,экскурсия**

Үҙләштерелергә тейеш белем:
- ярҙамсы һүҙҙәр;
- морфологик һәм фонетик структураһы яғынан ымлыҡтарҙың бүленеше;
- оҡшатыу һүҙҙәренең бүленеше.

Күнекмәләр:
- ымлыҡтырҙың һәм оҡшатыу һүҙҙәренең дөрөҫ яҙылышы;
- төрлө стилдәрҙә ҡулланыуы.

Ымлыҡтырҙың мәғәнәләре һәм вазифалары, уларҙың функциональ яҡтан бүленеше.

Оҡшатыу һүҙҙәре. Оҡшатыу һүҙҙәренең оноҡшаш һәм һыноҡшаш һүҙҙәргә бүленеше.

Практик эш төрҙәре:
- тәҡдим ителгән ымлыҡтар менән төрлө тойғоларҙы сағылдырған һөйләмдәр төҙөү;
- текста оҡшатыу һүҙҙәренең мәғәнәләрен аңлатыу.

Студенттың үҙаллы эш төрҙәре №40 :
- «Тыуған яҡ күренештәре» йәки «Тыуған яғым – гүзәл яғым» тигән темаларға инша яҙыу.

## Ҡулланылған төп әҙәбиәт


1. Усманова М. Ғ., Солтанғолова З. З. Башҡорт теле: башҡорт теле дәүләт теле итеп уҡытылған һөнәри белем биргән ойошмалар өсөн уҡыу ҡулланмаһы. – Өфө: Китап, 2015. – 264 бит.
2. Усманова М. Ғ. Башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән программа һәм методик күрһәтмәләр. /Һөнәри белем биргән ойошмалар өсөн башҡорт телен дәүләт теле итеп өйрәнеүселәр өсөн. – Өфө: Китап, 2015. – 112 бит.


## Ҡулланылған өҫтәлмә әҙәбиәт


1. Усманова М. Ғ. Башҡорт теле. Тестар. Уҡырға инеүселәр өсөн ҡулланма. Ҡыҫҡаса грамматика. 2 – се өлөш. – Өфө: «Окслер», 2012. – 68 бит.
2. Усманова М.Г. Грамматика башкирского языка для изучающих язык как государственный. – Уфа, Китап: 2012. – 168 с.
3. Хакимова В.Ш., Усманова М.Г. Башкирский язык для русскоязычной аудитории: Учебное пособие.- Уфа: РИО БашГУ, 2008.-272 с.
4. Хисамитдинова Ф.Г., Усманова М.Г. Башкирский язык.ru: Интенсивный курс. Учебное пособие для изучающих башкирский язык.- Уфа:ГУП «ГРИ «Башкортостан»», 2008.-200 с


## Интернет ресурстар


1. tel.bashqort.com>hisamitdinova (Электронный учебник для русскоязычной аудитории)
2. in-yaz-book.ru/bashkir/

1. W.w.w bashkort – tele. Ru
2. http.// bashkir. jimdo. com//
3. Bashkir. Jimdo. Com
4. www. bashklip. ru/
5. bashkort-tele. narod. ru
6. huzlek.bashqort.com